DOI 10.31833/12-11-2021-IV-127-129

Ғайсина Ф. Ф. (Өфө)

# БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРЫНДА ТИМЕРГӘ БӘЙЛЕ ЫРЫМ-ЫШАНЫУҘАР, ТЫЙЫУҘАР

Башҡорт халыҡ ижадының барлыҡ жанрҙарында ла тиерлек тимергә бәйле ырым-ышаныуҙар, тыйыуҙар күп. Көндәлек тормош-көнкүрештә йыш ҡулланылған тимер әйберҙәрҙең (бысаҡ, балта, бысҡы, көрәк, салғы, ураҡ, даға, ҡайсы, энә һ.б.) һәр береһе төрлө һынамыштар менән оҙатыла бара. Улар барыһы ла боронғо ата-бабаларҙың тормош тәжрибәләренән сығып әйтелгән.

Телсе-ғалимә Ф.Ғ. Хисамитдинова фекеренсә: "Тимер – башҡорт мифологияһында тылсымлы көскә эйә әйбер. Ышаныуҙарҙа тимер кешене һаҡлай, ҡурсалай, сир эйәләрен һәм ен-пәйрейҙәрҙе ҡурҡыта. Был уның ныҡлығын, ҡатылығын, оҙаҡҡа сыҙамлығынан, ут менән бәйле булыуынан килә" [Хисамитдинова, 2015. 333 б.]. Ҡөрьәндә иһә, 57-се сүрә "Әл-Хәдид" (Тимер) тип атала, уның 25-се аятында: "...Һәм тимер төшөрҙөк – унда кешеләр өсөн көслө яуызлыҡ һәм файҙа ла бар", тиелгән [Ҡөрьән Кәрим, 1992. 267–299 б.]. Бында тимер күктән төшөрөлгән есем икәне аңлашыла. Дин тарихынан билдәле булыуынса, Аллаһ Тәғәлә Дауыт пәйғәмбәргә тимер серен өйрәткән һәм ул тимерсе булғанлығы мәғлүм. Шуға ла, башҡорт ауылдарында: "Автоһәләкәттәргә осрамаҫ өсөн Дауыт пәйғәмбәр рухына, тип хәйер бирер кәрәк", тигән ышаныу бар."Урал батыр" эпосынан күренеүенсә, башҡорттар әлмисаҡтан, борондан ҡорос ҡойоу серен белгәндәр, сөнки эҫәрҙә Урал батырҙың ҡоростан да нығыраҡ алмас ҡылысы барлығы тасуир ителә. Эпоста бысаҡ та телгә алына [БХИ, 1998]. "Аҡбуҙат" эпосында ла Һәүбәндең алмас ҡылысы барлығы хаҡында әйтелә [БХИ, 1998. 166 б.].

2003–2018 йылдарҙа фольклор экспедициялары ваҡытында беҙҙең тарафтан тимер әйберҙәргә бәйле байтаҡ ырым-ышаныуҙар, тыйыуҙар яҙылып алынды. Уларҙың күбеһе бысаҡ тураһында. Бысаҡ, ул көнкүрештә көндә ҡулланылған тимер предмет, эш ҡоралы ғына түгел, ә төрлө йолалар атҡарғанда, им-томда файҙаланылған ритуал элементы ролен дә башҡара. Халҡыбыҙҙа иң киң таралған һынамыш булып: "Иҙәнгә бысаҡ төшһә – ир кеше килә" тигән һынамыш тора. Бысаҡҡа бәйле йыш осраған тыйыуҙар байтаҡ: "Бысаҡ "баҫып" торорға тейеш түгел, мал зыянлай, ятҡырып ҡуярға кәрәк", "Бысаҡ аша ашарға ярамай", "Бысаҡты кешегә тотторғанда йөҙө менән бирмә, әйләндереп бир", "Бысаҡты осло яғы менән бирергә ярамай", "Өҫтәлдә бысаҡ берәү генә йөрөргә тейеш", "Бысаҡты йыш ҡулға тоторға ҡушылмай", "Бысаҡты тәҙрә төбөнә һалып ҡуйырға ярамай, ҡаза көтөп ята", йәки "Ике бысаҡты бергә һалма, һуғыш сыға" тип, уның зарар килтереп ҡуйыу ихтималлығынан ҡурсалап әйткәндәр. Сөнки, бысаҡ теләһә ҡайҙа ятһа, кеше уның аша үрелһә берәй ере киҫелеп йәрәхәтләнеүе ихтимал, йәки кеше һөрөнөп китеп, уның өҫтөнә йығылып, ҡаҙалыуы мөмкин. Шуға ла, хужалыҡта бысаҡтың нисек, ҡайҙа ятыуына иғтибар иткәндәр. "Өҫтәлдә бысаҡ йөҙлөгө менән өҫкә ҡарап ятһа – ғауға була", "Бысаҡты төнгөләккә өҫтәлдән алып ҡуйырға, юҡһа шайтан уйната", "Бысаҡты төнгөгә өҫтәлдә ҡалдырырға ярамай" тигәндәр.

Ауылдарҙа "Ҡөрьән ашы", "Аят уҡытыу" кеүек дини йолалар атҡарғанда:

“Ашағанда өҫтәлдә бысаҡ тоторға ярамай, фәрештәләр ҡурҡа”, “Ашап ултырғанда ике кеше араһына бысаҡ булырға тейеш түгел”, “Табында бысаҡ булырға тейеш түгел”, “Хәйер биргәндә, “Әппәр” (Аллаһу әкбәр) иткәндә, “Әмин” иткән ваҡытта өҫтәлдә бысаҡ булырға тейеш түгел, йыйып ҡуйырға”, “Бысаҡты ишек яҡҡа арты менән һалыр кәрәк, шулай итһәң бәрәкәт китмәй. Икмәкте лә теленгән яғы менән ишеккә ҡаратып һалмайҙар, йорттан ризыҡ, бәрәкәт китмәһен өсөн”, тиҙәр Балаҡатай районында. Был һуңғы тыйыуҙарҙа ислам дине йоғонтоһон һәм икмәкте ололауҙы күрәбеҙ. Белорет районында ла: “Икмәккә бысаҡтың осон тығып, сәсеп телергә ярамай. Ҡырыйынан теләә башларға, ҡырыйы менән”, “Яңы бешеп сыҡҡан эҫе икмәккә бысаҡ тейҙерергә ярамай, уны һындырып ҡына ашарға ҡушыла” тиҙәр. Бында ла кешенең ризыҡҡа, икмәккә ҡарата ихтирамы күренә. “Бысаҡты, ҡайсыны тәҙрә төбөнә һалып ҡуйырға ярамай, фәрештәләр ултырмаҫ, сөнки, фәрештәләр тимерҙән ҡурҡа”, тиҙәр. Фәрештәләрҙең тимер әйберҙәрҙән ҡурҡҡанлығы башҡа тыйыуҙарҙа ла күренә, мәҫәлән, “Зыяратҡа тимер рәшәткә ҡуйырға ярамай, фәрештәләр ҡунмай” тиҙәр.

Им-том жанрында ла бысаҡ айырыуса актив ҡулланыла, мәҫәлән: ҡот ҡойғанда “Аятел-көрси” (Ҡөрьән, 2-се сүрә, 255-се аят) уҡыйҙар, шул ваҡытта бысаҡты иҙәнгә һалалар һәм өшкөрөүсе кеше уның өҫтөнә һыңар аяғы менән баҫып тора. Әгәр кемгәлер ен эйәләһә, уны ҡыуғанда ла, бысаҡ менән һелтәнеп өшкөрәләр. Мәҫәлән: “Өшкөргәндә – 7 бысаҡ менән өшкөрәм. Бер бысаҡ менән төртөп бер доға уҡыйым да, бысаҡты ташлайым. Аҙаҡ, икенсе бысаҡ менән төртөп, доға уҡып ташлайым. Шулай, ете бысаҡ менән уҡыйым. Өшкөргәндә аяҡ аҫтына бысаҡ һалыу, ул ен килмәҫкә”, – тине 2017 йылда Байназарова Люциә Тимерҡаҙыҡ ҡыҙы (1945 й., Стәрлебаш р-ны Үрге Шәкәр ауылынан). “Бөҫер имләгәндә ауырыуҙы ҡурҡытыр өсөн: “...Бысаҡ менән һөрөрмөн, салғы менән ҡыярмын” тип әйтәм” ти 2004 йылда Мөзипова Кәшифә Мансур ҡыҙы (1938 й., Свердлов өлкәһе Түбәнге Серге районының Өфө-Шигере ауылынан). Шулай уҡ, элек сир кермәһен өсөн, ауылдарҙы, өйҙө уратып һабан, йә тимер таяҡ менән “Аятел-Көрси” уҡып, һыҙып сығыр булғандар. Был ышаныуҙар тимерҙең яуыз көстәрҙән, аурыуҙарҙан һаҡлай тигән ышаныуҙан килә: “Ишек башына салғы, йә ураҡ ҡуйһаң, яуызлыҡ уйлап ингән кешенең яуызлығы үтмәй ти”, “Йоҡлаған ергә ҡапма-ҡаршы даға һалһаң аяҡ-ҡул һыҙламай. Ул ат аяғынан төшөп ҡалған даға булырға тейеш” тиҙәр. Йортто, өй эсен ендәрҙән, бысраҡ энергиянан таҙартыу ритуалын түбәндәгесә аңлаттылар: “Өйҙө таҙартам тиһәң, бысаҡты салҡан тотоп, артыш менән бергә булһа ла мөмкин, доға уҡып, йөрөтөп-йөрөтөп, ишек төбөнә (кешегә зыян итмәгән ергә) сәнсеп ҡуяһың. Шул ете көн торорға тейеш. Унан туҡтауһыҙ һыу ҡойоп торорға”, тине 2010 йылда Бохарбаева Сания Далха ҡыҙы (1933 й., Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан). Күреүебеҙсә, был тимергә бәйле ырым-ышаныуҙарҙа урын, ваҡыт, йүнәлеш, сифат, һан символдары асыҡ сағылған.

Артабан, яуыз көстәрҙән һаҡланыу өсөн: “Баланы яңғыҙ ҡалдырһаң, ен алмаштырмаһын өсөн өҫтөнә бысаҡ йә ҡайсы һалып сығырға”, “Мәйет ҡарауыллағанда ла, мәрхүмгә ен эйәләшмәһен өсөн, өҫтөнә бысаҡ йә ҡайсы һалып ҡуялар” тиҙәр. Халыҡта шулай уҡ, сихырҙан, күҙ тейеүҙән һаҡланыр өсөн әйбергә энә, булавка ҡаҙап йөрөү ғәҙәте лә бар.

Рус халҡының имселәре лә, өшкөргәндә бысаҡ, йә ураҡ ҡуллана. Әүермәндәр берәй хайуанға әүрелер алдынан ҡапҡаларының алдына бысаҡ ҡаҙап, шуның аша әйләнеп сығалар икән [Гайсина, 2016. 32 б.].

Халыҡ араһында көрәк, балта тураһында ла ырым-ышаныуҙар бар: "Көрәкте һөйәп ҡуймайҙар – ҡәбер теләй", "Йәшәгән өйгә көрәк һөйәп ҡуймайҙар. Шайтан килеп һорай ти, нишләп тораһың, тип. Ҡаза теләп торам, тип әйтә ти", "Балтаны иңбашҡа һалып йөрөмәйҙәр, ҡаза теләй ти". Әммә, был тыуыуҙар көрәктең, балтаның тимер булғанына ҡарап түгел, ә башҡарған функцияларына төбәп әйтелгәндәр. Балта, бысаҡ менән ямғыр туҡтатып була икән тигән ышаныс тә йәшәй халыҡта: "Күк күкрәп, ныҡ йәшенләп ямғыр яуһа, болоттарҙы уртаға сапҡан ишара менән балтаны һелтәп, ергә сабып ҡуялар, ямғыр туҡтатыр өсөн" тиҙәр. "Ҡойон яҡынлашһа, әрләй-әрләй уға бысаҡ ташлағандар. Боҙ, борсаҡ яуғанда урамға һоҫко, тәртешкә, кеүек тимер өй кәрәк-яраҡтарын сығарып ташлағандар" [Хисамитдинова, 2015. 333 б.]. Ҡойонға шулай уҡ, башҡа ураҡ, салғы кеүек осло тимер предметтарҙы ла ырғытҡандары билдәле.

Дағаға бәйле ырымдарға килгәндә: "Даға тапҡан бала бәхетле була", "Тупһа астына даға ҡағалар, ен-шайтан кермәһен өсөн" – тиҙәр Балтас районында. Асҡыс тураһындағы тыйыуҙарға килгәндә: "Асҡысты өҫтәлгә һалырға ярамай, бәлә килтерә", "Асҡыс менән уйнамайҙар, ғаиләлә ғауға була", тигән ышаныу, тыйыуҙар бар.

Ғөмүмән, тимер тураһында төрлө ҡараштар бар, мәҫәлән: "Балаға Тимер менән бәйле исемдәр ҡушырға ярамай" тигән тыйыу − баланы ҡаты бәғерле, уҫал булып үҫеүҙән ҡурсалау булараҡ күҙаллана. Был тимерҙең ҡаты һәм һыуыҡ булыуынан сағыштырып әйтелгән. Бала йыш ауырыһа ғына, ныҡ булһын тип, Тимербай, Тимерйән (хәҙер Тимур тиҙәр) исемдәрен ҡушалар [Ғайсина, 2017. 76–78 б.]. Башҡорттарҙа боронда тимер биҙәүестәр: балдаҡ, алҡа ҡытай, беләҙек кеүек әйберҙәр тағып йөрөү ғәҙәте бар. Сөнки, улар күҙ тейеүҙән, зәхмәт ҡағылыуҙан һаҡлай тигән ышаныуҙан килә, бигерәк тә көмөш алҡа беләҙектәр ендәрҙән ҡурсалай тиҙәр.

Шулай итеп, йыйылған материалдарҙан күренеүенсә, тимерҙең аурыуҙарҙы, ендәрҙе ҡыуыу кеүек файҙалы функциялары барлығына ышаныу әле лә һаҡлана. Был ырым-ышаныуҙар хәҙерге заманда ла актуаллеген юғалтмағандар, бигерәк тә ауылдарҙа бөгөндә киң ҡулланылалар.

**Әҙәбиәт:**


1. Башҡорт халыҡ ижады. Эпос / Төҙ. Ә. М. Сөләймәнов. Өфө: Китап, 1998.
2. Ғайсина Ф. Ф. Башҡорт фольклорында кеше исемдәренә бәйле ырым–ышаныуҙар, тыйыуҙар // Теоретические и практические проблемы развития современной гуманитарной науки. Уфа, 10–11 апреля 2017 г. Уфа: БашГУ, 2017. С. 76–78.
3. Гайсина Ф.Ф. Устные рассказы о русских колдунах и оборотнях в фольклорной памяти башкир // Славянские этносы, языки и культуры в современном мире. Уфа, 8-9 декабря 2016 г. Уфа: Риц БашГУ, 2016. С. 30–33.
4. Ҡорьән Кәрим. Өфө: Башҡ. китап нәшр. 1992.
5. Хисамитдинова Ф.Ғ. Башҡорт мифологияһы һүҙлеге. Өфө, 2015.